**ЗАДАНИЯ ДЛЯ 10-11 КЛАССОВ**
**ИНСТРУКЦИЯ ПО ВЫПОЛНЕНИЮ ОЛИМПИАДНЫХ ЗАДАНИЙ**

**ПО ФИЛОЛОГИИ (РОДНЫЕ ЯЗЫКИ- БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА)**

Олимпиадная работа состоит из 25 заданий по башкирскому языку и литературе. Следует внимательно читать указания, относящиеся к правилам выполнения каждого задания.

На выполнение олимпиадной работы отводится 4 часа.

Каждое задание оценивается соответствующим баллом. Баллы, полученные Вами за выполненные задания, суммируются.

Постарайтесь выполнить как можно больше заданий и набрать наибольшее количество баллов.

После завершения работы проверьте, чтобы ответ на каждое задание в бланках ответов был пронумерован в соответствии с номером задания.

Все бланки заполняются яркими чёрными чернилами. Допускается использование гелевой или капиллярной ручки.

При выполнении заданий можно пользоваться черновиком. Записи в черновике, а также в тексте олимпиадных материалов не учитываются при оценивании работы.

Пишите аккуратно, разборчивым почерком.

Желаем успеха!

## ЧАСТЬ 1. БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

**Задание 1.** Фонетика, лексикология, синтаксис. Был бүлектәрҙең һәр ҡайһыһы нимәне өйрәнә? Тел ғилеменең тағы ниндәй бүлектәрен беләһегеҙ?

**Задание 2.** Бөгөлгән баш ергә. Үтә һөйгән өсөнмө?!
Бөгөлгән баш – һөйә, <u>көйә</u> ала, тиһеңме?! ( Р.Назаров).
Аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй мәғәнәлә ҡулланылған? Тағы ниндәй миҫалдар килтерә алаһың?

**Задание 3.** *Ошондайҙарында*һүҙендә ниндәй үҙгәртеүсе ялғауҙар бар?

**Задание 4.** Бала һүҙенең 1-се заттағы күплек формаһын килеш менән үҙгәртегеҙ

**Задание 5.** *Азат университетта уҡый, уның буласаҡ <u>һөнәре</u> – уҡытыусы.* Был һөйләмдә аҫтына һыҙылған һүҙгә морфологик анализ яһағыҙ.

**Задание 6.** *Уның хыялланыуын тыңлап тороусы кешеләр ҡапыл көлөп ебәрҙе.* Был һөйләмдә ҡылымдың ниндәй төркөмсәләренә миҫалдар табып була? Һәр береһен күсереп алып, эргәһенә төркөмсәһен билдәләп яҙығыҙ.

**Задание 7.** *Төнө буйы <u>ялт-йолт</u> йәшен йәшнәне, <u>шабыр-шобор</u> ямғыр яуҙы* (М.Ғафури) һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙе ниндәй һүҙҙәр тип атайҙар һәм улар һөйләмдә ниндәй функция үтәйҙәр?

**Задание 8.** *Ҡайҙа ярлы, ҡайҙа зарлы, ҡайҙа моңлолар була, мин шулар янында булам, улар менән килешеп була* (М. Ғафури). Был ҡушма һөйләм эсендәге һөйләмдәрҙең бер-береһенә бәйләнеү юлдарын асыҡлағыҙ.

**Задание 9.** *Донъяла һинән дә бәхетлерәк, һинән дә матурыраҡ бер кем юҡ* һөйләмендә ҡылым ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?

**Задание 10.** *Ата байлығы улға йоҡмаҫ, әсә байлығы ҡыҙға йоҡмаҫ* (Мәҡәл).
Был ниндәй һөйләм?

**Задание 11.** “Тел” һүҙенең ниндәй мәғәнәләре бар, уның нигеҙендә яһалған ниндәй фразеологизмдар беләһегеҙ?

**Задание 12.** Һөйләмдә тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып сығығыҙ:
*Бөтә тирә-яҡ тауҙар таштар ағастар үләндәр сәскәләр йәнлектәр ҡош-корттар бөтәһе лә ҡояш сығасағын һиҙгән төҫлө тынысланып иркен һулыш алып ебәрҙеләр*(М.Кәрим).

**Задание 13.** *<u>Йыйылыш</u> ваҡытын ҡасанға билдәләйбеҙ?* Һөйләмдә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй килештә тора.

**Задание 14.** Һөйләмдә ниндәй киҫәктәр тиң булып килгән икәнен асыҡлағыҙ: *Бурыл уҫал, Ғәләмшә әбей йыуаш, Бурыл ялҡау, Ғәләмшә әбей егәрле, Бурыл һимеҙ, Ғәләмшә әбей ябыҡ* (С.Агиш).

**Задание 15.** Бирелгән теҙем нисә һөйләмдән төҙөлгән икәнен билдәләгеҙ:

*Һылыуы бар был илдең,*
*Матуры бар был илдең,*
*Йылғаһынан һыулаған,*
*Тупрағында аунаған,*
*Урал буйын буйлаған,*
*Ат өҫтөндә уйнаған,*
*Ҡаяла башаҡ ҡайраған,*
*Ҡыҙҙың һылыуын һайлаған,*
*Тыуған ерен һаҡлаған,*
*Ир намыҫын һатмаған*
*Батыры бар был илдең* (ҡобайырҙан).

## ЧАСТЬ 2. БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА

**Задание 1.** *"Халыҡ ижады"* һәм *"яҙма әҙәбиәт"* төшөнсәләренә аңлатма яҙығыҙ. Бер-береһенән улар ниндәй сифаттары, үҙенсәлектәре менән айырыла? Уртаҡ яҡтары нимәлә?

**Задание 2.** Нимә ул *йәнәшәлек*? "Буранбай" йырынан алынған өҙөктән сығып, уның әҫәрҙә тотҡан урыны, мәғәнәһе, художество үҙенсәлеге хаҡында фекерҙәрегеҙҙе яҙығыҙ.

*Һаҡмар ғына һыуҙың яры бейек,*
*Йәбешеп кенә сығыр талы юк.*
*Буранбай ҙа менән Ибраһимдың*
*Биреп кенә ҡайтыр малы юк.*

**Задание 3.** Нимә ул лиро-эпик жанрҙар? Уларға 3 миҫал яҙығыҙ, һәр береһенә мөмкин тиклем тулы ҡылыҡһырлама бирегеҙ, уларҙың төп сифаттарын билдәләгеҙ.

**Задание 4.** Художество методы булараҡ *романтизм һәм сентиментализм*. Уларға билдәләмә бирегеҙ, конкрет миҫалдар нигеҙендә аңлатма яҙырға тырышығыҙ.

**Задание 5.** Я.Хамматовтың "Салауат" романында башҡорт төбәген өйрәнеүсе ғалим Лепехин авторлығына бәйле түбәндәге тексттың *ниндәй стилдә* яҙылыуын билдәләгеҙ, үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе дәлилләп яҙығыҙ.

*"Күсмә йәйләүҙәрҙә улар күбеһенсә ғаиләләргә бүленәләр, йәғни тыуған-тыумаса үҙҙәре бер йәйләүҙе тәшкил итә. Йәйләү өсөн һәр саҡ йылға йәки шишмә буйын һайлайҙар һәм, тирмәләре янына мал-тыуар яҡын килмәһен өсөн, уны кәртә менән уратып алалар. Иртәләрен малдарҙың һәр төрөн айырым ҡыуалар. Бейәләрҙе үҙенә башҡа, һыйырҙарҙы үҙҙәренә башҡа көнәктәргә һауалар. Һыйыр һөтөнән май бешәләр, ҡорот киптереп ыҫлайҙар. Әсе ҡатыҡтан шыйыҡланған айранды ғәҙәттәге эсемлек урынына ҡулланалар. Бейә һөтөнән ҡымыҙ яһайҙар, бик тәмле эсемлек, был уларҙың төп аҙығын тәшкил итә..."*

**Задание 6.** Нур Ғәлимовтың "Яуҙан ҡайтҡан ҡурай" әҫәрендәге түбәндәге өҙөктә *ниндәй хикәйәләү алымы* ҡулланылған? Үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе дәлилләп яҙығыҙ.

*"- Башҡортостандан бүләктәр тейәп, беҙ фронтҡа киттек. Кавалерия егеттәре менән осраштыҡ. Шунда мин Ғәйфулла менән осраштым. Ул миңә бүләк итеп ошо ҡурайҙы бирҙе...*

*Ғәйфулла, фронттан ҡайтҡас та әле, оҙаҡ йылдар буйы тамашасыларҙы ҡурай уйнап һоҡландырҙы, дәртле аккордеонсы һәм талантлы артист булды...*

*Ә бына теге яуҙан ҡайтҡан легендар ҡурай әле лә музейҙа тора. Ул һуғышсының, кешенең, артистың яҡты иҫтәлеген һаҡлай, кешеләргә яуҙан ҡайтҡан ғәжәп бер тарихты хәтерләтә".*

**Задание 7.** Совет осоронда республикала йәш ижадсыларҙы бүләкләү өсөн Ғ.Сәләм исемендәге дәүләт премияһы булдырылғайны. Үткән быуаттың 90-сы йылдарынан ул Ш.Бабич исемен йөрөтә башланы. Ошо үҙгәрештәрҙең сәбәбен нимә менән аңлатырһығыҙ? Мөмкин тиклем фекерҙәрегеҙҙе нигеҙләп яҙығыҙ.

**Задание 8.** У.Шекспирҙың “Король Лир” трагедияһында Йүләр, А.С.Пушкиндың “Борис Годунов”ында Юродивый, Ф.И.Достоевскийҙың “Бер туған Карамазовтар” романындағы Зосим ҡарт – йөкмәткеләре менән бер-береһенә оҡшаш образдар. Мостай Кәрим ижадында ла шундай образ бар. Кем ул, ниндәй әҫәрҙән? Уға ҡылыҡһырлама яҙығыҙ.

**Задание 9.** Рус әҙәбиәтендәге “базаровщина” булған һымаҡ, башҡорт әҙәбиәтендә лә айырым кәмселектәрҙе, йәмғиәттә йәшәгән негатив күренештәрҙе һынландырған образдар бар. Ғ.Сәләмдең “Бала” поэмаһы менән бәйле *“эршитселек”* күренешенең асылы нимәлә? Бөгөнгө йәмғиәттә бармы ул? Фекерҙәрегеҙҙе аныҡлап яҙығыҙ.

**Задание 10.** Ә.Бикчәнтәевтың “Бөркөт һауала үлә” әҫәренең түбәндә бирелгән өҙөгөнән сығып, уның сюжет элементтарының ҡайһыныһына тура килеүен асыҡлағыҙ *(экспозиция, төйөнләнеү, ваҡиғалар үҫеше, кульминация, сиселеш)*. Ни өсөн? Сюжет һәм уның элементтары хаҡындағы белемегеҙҙе иҫкә төшөрөп, фекерегеҙҙе дәлилләп яҙығыҙ.

*“Ана амбразура!.. Унан татылдап, ҡыҙарған пулемет көбәге сығып тора. О, ни тиклем яуызлыҡ ул көбәктә! Ул үлем сәсә!.. Егеттәрҙе унан ҡотҡарырға кәрәк. Улар Чернушкиҙы азат итергә һүҙ бирҙеләр бит! Комсомол йыйылышында юҡҡа ғына ант итмәнек...*

*Саша һығылмалы хәрәкәт яһап аяҡ үрә баҫты ла ҡапыл дзоттың ҡарайып торған амбразураһына ташланды.*

*“Бына якшы булды, тәки килеп еттем”..”*

*Ун туғыҙ йәшлек комсомолец, гвардия рядовойы Александр Матросовтың һуңғы һүҙҙәре шул булды...”*